йылдың 9 майы.

**ИТАР-ТАСС фотоһы.**

ауыл Советы — 10
Ҡорғат — 6;
Тимерәк — 1;
Йонос — 5.

# АҘАЯ БАРАЛАР

Еңеүҙең 50 йыллығын Ҡотош ауылында ете фронтовик ҡаршы алды. Ике йыл эсендә шуларҙың өсәһе мәрхүм булды: Мөхәмәтнур Фәтихов, Сәлимйән Әхмәтйәнов һәм Ахун Шафиков. Бөгөн дүрт һалдат иҫән-һау (һүрәттә һулдан уңға): Зариф Ғариф улы Фәтихов, Мөхәмәтхай Йыһангир улы Йәрмөхәмәтов, Рәүил Хәйретдин улы Ғәлиуллин һәм Вафа Мостафа улы Әхмәҙуллин.

Ауылдың күренекле аҡһаҡалы В. М. Әхмәҙуллин тураһында бөтәһе лә беләләр. Ул ғинуар айында үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләне. Һуғыштың тәүге көндәренән үк ул Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә, ҡамауға эләгә, Украинала партизан отрядында һуғыша, Словакиялағы партизан отряды командиры була.

М. Й. Йәрмөхәмәтов 3-сө Украина фронтының 62-се гвардия дивизияһы составында һуғыш менән Украинаны, Румынияны, Венгрияны байҡай, еңеүҙе Австрияла ҡаршы ала. Будапештта барған һуғыштарҙың береһендә яу яланынан 8 яралы һалдатты һәм бер пулемет алып сыға, ошо батырлығы өсөн наградаға тәҡдим ителә. Бөгөн уға "Батырлыҡ өсөн" миҙалын тапшырыу бик ҡыуанысլы ваҡиға буласаҡ.

З. Г. Фәтихов НКВД ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән, ул Украина территорияһын фашист ялсылары — бандеровсыларҙан таҙартыуҙа ҡатнашҡан. Р. Х. Ғәлиуллинға милитаристик Японияны емереүҙә ҡатнашырға тура килгән, ул дошмандарҙы Көньяҡ Сахалиндан һәм Курил утрауҙарынан ҡыуған.

— Эйе, беҙ аҙ ҡалдыҡ. Ҡотошта беҙ дүртәү генә. Һөләймәндә икәү — Мөхәмәтнур Кәримов һәм Нәғим Таһиров. Ләмәҙтамаҡта һигеҙ ветеран бар: Фердинанд Клызбаев, Вәкил Таһиров, Харис Әхмәтов, Нәжип Шәрипов, Әғзәм Ҡотлоев, Мөхәмәтулла Кәлимуллин, Рәхимйән Әбдрәфиҡов, Мансур Бәҙретдинов. һәм Һабанаҡта Таиф Зарипов, Фәхрәзи Бәҙретдинов һәм Биктимер Йомаҙилов, ауыл Советы буйынса йәмғеһе 17 кеше,...- тип һанап үтте ветерандар.

Хоҙай ныҡлы сәләмәтлек бирһен үҙегеҙгә, хөрмәтле аҡһаҡалдар.

**В. ҒАТАУЛЛИН фотоһы.**

